*Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ*

# Салауаттың мөхәббәт йырҙары

”Мөхәббәт йырҙары һәр халыҡтың да ауыҙ-тел ижадында киң таралған. Һөйөү хисе бөтә халыҡтар, бөтә кешеләр өсөн дә берҙәй үк дәрәжәлә аңлайышлы һәм ул күп осраҡтарҙа йыр-моң булып ағылыусан, — тип яҙа Салауат Галин. — Мөхәббәт йырҙары өсөн ғашиҡ булған егет менән ҡыҙҙың тойғо һәм хистәрен һүрәтләү хас... Йырҙар, егет йөрәгенә ут һалған ҡыҙҙың буй-һынын идеаллаштырыу менән бергә, уның күңел сафлығын һүрәтләүгә лә ҙур урын бирә, әҙәпле һәм тартынсаҡ булыуын һыҙыҡ өҫтөнә ала... Бер үк ваҡытта мөхәббәт йырҙарында һүрәтләнгән ҡыҙ ғорур ҙа, мөхәббәт хаҡына ул утҡа ла, һыуға ла инергә әҙер... Йырҙарҙа егет менән ҡыҙҙың тәүге саф тойғоларын да, шомло уйланыуҙарын да, һарғайыуын да, моңайыуын да күрергә мөмкин (1, 33)...”

Сәсәнме, ҡурайсымы, йыраусымы, батырмы, аҡыл эйәһеме, ханмы, шаһмы, солтанмы — береһенә лә мөхәббәт уғы ҡаҙалмай ҡалмаған, һәммәһе ғашиҡ булған, ҡыҙ йәрәшкән, ғаилә ҡорған, бала баҡҡан, улына кәләш алған, ҡыҙын лайыҡлы ир-егеткә кейәүгә бирергә тырышҡан. Хатта аллалар, пәйғәмбәрҙәр, батшалар ҙа мөхәббәткә баш эйгән. Һөйөү хисе бер ваҡытта ла һүрелмәй,



ғишыҡ уты һүнмәй, мөхәббәт — мәңгелек.

Башҡорт халҡының милли геройы Салауат Юлаев тарихта тыуған ерен өҙөлөп һөйөүсе, халҡына ирек даулаусы, башҡорт ерҙәрен талап алыуға ҡаршы көрәшеүсе батыр һәм шул уҡ ваҡытта Урал һылыуҙарына ҡайнар һөйөү тойғоларын еткереүсе шағир һәм йыраусы булараҡ та киң билдәле. Тарихсы, этнограф, фольклорсы Руф Гаврилович Игнатьев (1818—1886) башҡорт Салауат Юлаевтың йырсы һәм импровизатор булыуын да яҙып, уның ҡайһы бер йырҙарын рус теленә тәржемә итеп баҫтыра (5, 66—70).

Салауат Юлай улын хәтерләгәндә уның көс-ҡөҙрәте, ғәййәрлеге, ҡаһарманлығы, ирек һөйөүсәнлеге, сәсәнлеге тураһында ғына һөйләп, яҙып ҡалмайҙар, шәжәрәһен, нәҫел-нәсәбен, ғаиләһен дә телгә алалар, шиғырҙарында һәм йырҙарында сағылған мөхәббәт тойғоларын да күңелдән үткәрәләр. Әйтәйек, мөхәббәткә мәҙхиә йыры — "Зөләйха" быуаттар үткәс тә йөрәкһетә, хискә тулыштыра, күңелде йәшәртә. Хоҙай Тәғәлә хасил иткән донъя, тәбиғәт кеүек, уның һылыуы ла хозур, һоҡланғыс (4, 177):

Зөләйха, һин ергә ингән хур ҡыҙы,
Күҙҙәреңдә балҡый Зөһрә йондоҙо.
Күҙҙәрең, гүйә, төндәге күк йөҙө,
Яҡтыра шул күҙҙәреңдә ай үҙе.
Ер хуры һин йәки ожмах шәүләһе,
Һындарың, гүйә, фәрештә кәүҙәһе.

Бындай ер хуры батырҙы ла бахыр, мәжнүн ҡыла, буйһондора, иҫһеҙ-һушһыҙ итә:

Мин, бахыр, һине, Зөләйха,
ныҡ һөйәм,
Әйтә алмайса һүҙҙәремде, баш
эйәм.
Һиңә дан йырлар өсөн телем зәғиф,
Һөйөүемде әйтергә һүҙем зәғиф.
Зөләйха, һин ерҙә йөрөгән
хур ҡыҙы,
Күҙҙәреңдә яна күктең йондоҙо.

Бына ниндәй тылсымға, сихырға, көс-ҡөҙрәткә эйә ҡатын-ҡыҙ һылыулығы, нескә заттың илаһи нуры, ҡояштай иретер һәм иркәләр наҙы. Ул — арбағыс, ымһындырғыс, әүрәткес...

Мөхәббәт — урғып торған хистойғо. Ҡайҙа һөйөү, шунда һағыш, шунда илһам, ижад, моң. Ғашиҡтарҙың күңелдәре ҡоштай талпына, былбыл булып һайрай, был моң ғәм дә, сәм дә, йәм дә була. Мөхәббәт өсөн йән фиҙа.

Халыҡ ижадында ҡыҙҙар, егеттәр әйтеше, егет менән ҡыҙ әйтеше, ғашиҡтар, кейәү менән кәләш йырҙары һаҡланып ҡалған. Ҡыҙ күҙләгәндә йыш ҡына йырлашып танышҡандар, аңлашҡандар, һөйөүҙе йыр аша белдергәндәр. Егет ҡыҙҙы, ҡыҙ егетте матурлығы, батырлығы менән генә түгел, йыр менән дә арбаған, ғашиҡ иткән.

Йыр сығарыу, көй көйләү маһирлығы — уй уйлау һәләте, аңзиһен асыҡлығы билдәһе, күңел байлығы күрһәткесе лә. Борон өйләнер алдынан егеттең донъя, ғүмер, яҙмыш тураһында йыр менән яуап ҡайтарыуы уны рухи йәһәттән һынауҙың бер төрө лә булған. Уртаҡ бер ыңғай фекергә килеү өсөн һөйләшеү, йәғни мәслихәт, кәңәш туйында ла ҡара-ҡаршы йырлашҡандар. Кейәү һандығын асыу йолаһында ла ҡыҙҙың, егеттең йырға һәләтен һынағандар.

Йыр-моң бала тыуған мәлдән уның күңеленә һеңдерелгән. Бәпесте инәһе, ҡартинәһе көй көйләп бишектә тирбәткән. Һәр кем ише менән ярала, тиеп, бәпестәргә (ул менән ҡыҙ балаға) ҡырҡ көн тулғанда — бишек туйы, ир бала атҡа менерлек, ҡыҙ бала көйәнтә күтәрерлек булғас, һырға туйы уҙғарғандар. Бишек туйында сабыйҙарҙың ҡолағын тешләтеп, ҡиәмәт инәйҙәр, әбейҙәр һамаҡлап теләк теләй. Һырға туйында ла үҫмерҙәргә теләк, өгөт-нәсихәт әйтәләр, бәхет, тәүфиҡ, тигеҙ ғүмер теләйҙәр, ҡара-ҡаршы әйтешеп, йырҙар йырлайҙар, бейейҙәр. Ҡушамат ҡыҙ көрәштә бил бирмәгән егеткә йөҙөк бүләк итә. Бүләген тапшырғанда ҡыҙ шулай тип йырлай:

Ашҡынып та аға яҙғы һыуҙар,
Ер йылынғас, яҙғы ла үҙәндә.
Егеткәйем, һиңә мин бүләкмен,
Эсәр һыуым булһын иләндә.

Йола буйынса егет үҙен һөйгән ҡыҙға йыр менән яуап бирергә тейеш. Туйҙа ҡыҙ ҙа, егет тә, һәр ике яҡ йырсылары ла һыр бирмәҫкә тырыша (3, 370—375). Ғөмүмән, йыр илаһи бер сыӊ булып, кешене ғүмере буйына оҙата килә. Әйтәйек, йырға маһир атайым менән Мәүҙиә апай мәжлестәрҙә ҡара-ҡаршы йырлаша ине һәм был бик күркәм күренеш була торғайны.

"Юлай менән Салауат" тарихи ҡобайырында әйтелеүенсә (2, 272—279), Һағынбай тигән тархан Гөлбәзир исемле ҡыҙын Салауатҡа бирмәк булып, ҡолағын тешләтеп, туй яһап, Юлай менән ҡоҙалашҡан... Салауат егет ҡорона ингәс, уға кәләшкә Гөлбәзирҙе бирергә, ҡоҙа-аҙна яһашырға Һағынбай күнгән, был уйын Юлайға үҙе барып еткергән. Был хәбәрҙе еӊгәһе аша Гөлбәзир ҙә ишеткән һәм илсе итеп Салауатҡа бер егетте ебәргән.

Артабан Салауаттыӊ ҡыҙҙы күрергә, уныӊ менән осрашырға, һөйләшергә, аӊлашырға барыуы тасуирлана. Йылҡы елегә төшөп, һыйыр-һарыҡ яланға әллә ҡасан ҡыуылып, ҡояш һөӊгө буйындай күтәрелгән сағында, Салауат атҡа атланып, Һағынбай аймағына елдереп килә. Туғай аша үткәндә, ул, сыр-сыу килеп, гөрләшеп еләк йыйған ҡыҙҙарҙы күреп ҡала. Күмәк ҡыҙҙар араһында Гөлбәзир әхирәте менән ҡуш мунсаҡтай икәүләп килеүен таный. Егет төшә һалып, ҡуш теҙгенен эйәр ҡашына шаҡарып, атын сылбырҙан тотоп, үләнгә ҡырын ятып, ҡыҙҙарҙыӊ килеп етеүен көтә. Мәгәр бер ҡыуаҡҡа етеп, улар шунда туҡтай, араларынан берәү ҙә Салауатты шәйләмәй. Салауат түҙмәй, ҡыҙҙарға оран биреп, ошо йырын йырлай:

Урал буйҡайыныӊ, ай, туғайы
Яӊғыҙ егеттәргә йәм бирмәҫ.
Ике лә генә һөйгән бергә уйнаһа,
Һыуҙар ҡороп, ҡая ярылмаҫ.

Төшөнһәӊ, был йырға ҙур мәғәнә, йәшәү мәғәнәһе һалынған. Уралдыӊ иҫ киткес йәмле тәбиғәте лә яӊғыҙ егеттәргә йәм бирмәй. Һөйгән йәндәр бергә булғанда ғына, ҡауышып, ишләнеп көн иткәндә генә донъя бөтөн, йорт-ил күркәм. Сөнки йән аҙығы — йәр, һөйгән йәр — һөйәгеӊ елеге.

Салауаттыӊ йырын ишеткәс, яуап биргәндәй итеп, ҡыҙҙар ҙа йырлай. Салауаттыӊ Урал буйлап шаӊҡыған көслө тауышын танып, Гөлбәзир егет яғына ыӊғайлай. Бала саҡтан йәрәшелгән йәнкәй-йәнәшен күргәс тә, Гөлбәзир, баласа иркәләпме, ҡыҙҙарса наҙланыпмы, әллә ҡурҡыпмы, әллә баҙапмы, Салауаттыӊ янына оҙаҡ бармай тора. Юлдан килгәндә иһә ғашиҡ егеттеӊ күӊелендә шундай хис-хыялдар тыуған була: "Аулаҡта осрашһаҡ, Гөлбәзирем, күргәс тә, ҡосағыма ташланыр, бөтә серҙәрен һөйләп, күҙҙәрен йәшләндерер". Мәгәр ошо тәмле уйҙары юҡҡа сыҡҡандай төҫлө тойола. Салауат та һүҙ ҡушмай, Гөлбәзир ҙә һаулашмай, күҙгә күҙҙәр ҡарашып, байтаҡ өнһөҙ ҡала. Ахырҙа Салауат үпкәләгән һымаҡ ошо йырын йырлай:

Сәстәреӊдеӊ толом сулпылары
Сылтырауы салына үҙемә.
Күл буйында үҫкән ҡуға төҫлө
Тирбәлгәндәй күренә күҙемә.

Ағымдарға ҡаршы тулҡын төҫлө,
Түшкәйҙәреӊ ниӊә тулҡына?
Ысынлап та әллә үҙе шулай,
Әллә ҡурҡыуҙарыӊ тойола?

Бешеп кенә килгән алмаларға
Алһыу типкән төҫлө йөҙҙәреӊ.
Алланыуы — әллә һылыу төҫө,
Әллә асыу тотҡан уйҙарыӊ?

Ҡуғаларҙан аша күлгә төшкән
Ай нурындай күҙең тойолдо.
Ай битендә типкән миңдәр төҫлө,
Әллә күңелең шулай уйылды?

Яҙғы ҡояштарға ҡыҙған тауҙың
Һағымындай буйың елпенде.
Әллә елдәй күреп килеүемде,
Йөрәк гөлөң шуға һелкенде?

Сал бөркөттәй булып Урал буйлап
Ат уйнатып килдем йыраҡтан.
Һиңә — бөркөт түгел, Гөлбәзирем,
Ҡурҡыуыңды ташла йөрәктән.

Һандуғасты яҫҡыр ҡарсығаға
Килеүемде, һылыуым, оҡшатма.
Уҫал уйҙар менән килгәндер, тип,
Йөрәгеңде, һылыуым, һыуытма.

Ҡошҡа сөйгән йылғыр ҡарсыға ла
Өстән артыҡ ҡошто яҫҡымай.
Ата-инәңдән мин дә өс һораным,
Күп ҡабатлау миңә оҡшамай.

Ҡырау төҫлө, күңелең сәскәләрен
Батыр даным, иркәм, ҡыймаһын.
Әйтер һүҙең булһа, әйт үҙемә,
Үкенескә аҙаҡ ҡалмаһын.

Гөлбәзир:

Туғайҙарҙы баҫҡан көн томраһын,
Көтәм, елдәр иҫеп баҫһын тип.
Тыныслыҡтар һаҡлап һүҙ ҡушманым,
Талпынған да йөрәген баҫһын тип.

Урал тауҡайҙарын аша сығыу
Батырҙарға кәртә юлмы ни?
Ҡаф тауындай ата бейлектәрен
Ҡыҙға еңеү анһат эшме ни?

Ҡыҙ баланың наҙы, батырҡайым, —
Сәскәләрҙең наҙы, тиңдәше.
Ҡырау тейгән сәскә төҫлө була,
Көнөн бүлһә уның көндәше.

Кәкүк ҡоштары ла миҙгел һайлай,
Сәскә бөтһә, теле талыға.
Һинең сәскәң дә бит егетен һынай,
Ниңә унан күңелең ялыға?

Кейек ҡаҙҙар ҙа бит кире ҡайта
Тыуған еркәйҙәрен һағынып.
Һөйгән ҡыҙың мин үк
түгелме ни?! —
Ата-инәмдән һора ҡағынып.

Салауат:

Бала саҡтарымда инәң һинең
Ҡулдарыңдан тотоп үптерҙе.
Уҡа таҡыя алып баштарыма,
Кейәүкәйем, тип үк кейҙерҙе.

Мин үпкәндә йөҙөң алланманы,
Ни әйтергә телең белмәне.
Һин дә бала инең, мин дә — бала,
Йөрәгебеҙ бер ни һиҙмәне.

Ҡыҙыл таңдар төҫлө һыҙылып атты,
Бала эңере бөткәс, уйҙарым.
Урал аша ҡал(ы)ҡҡан ҡояш төҫлө,
Күҙ алдыма килде буйҙарың.

Ата-инәң уйым кире ҡаҡҡас,
Күңел сөйҙөм Урал буйына.
Йырҙарымды көсләп күп
йырланым,
Берәүһенә түгел, йөҙөнә.

Күҙҙәремде һирпеп күп йүгерттем
Урал ҡыҙҙарының йөҙөнә.
Ҡыйғыр ҡоштай күңелем
кире ҡайтты,
Мөрхәтһенмәй кире өйөмә.

Уралымда ҡыҙҙар күп булһа ла,
Йөрәгемдең сәбе һин генә.
Мин дә һиңә шулай булам икән,
Ҡафтау булыр тигеҙ юл ғына.

Гөлбәзир:

Ҡошҡайҙар ҙа һайрай, йөрәге ташһа,
Моңон сәсә, тормай көн һайлап.
Егеттәр ҙә һылыуын ысын һөйһә,
Атҡа менә, тормай юҡты уйлап.

Ҡара бауыр төлкө, ташҡан йөҙө
Түл сәсергә ҡырлас тауҙарҙа.
Батыр егеттәр ҙә ҡанға йөҙә
Һылыуы өсөн кәрәк саҡтарҙа.

Урал тауҙа үҫкән һылыу ҡыҙҙар
Үҙ батырын һөймәй булырмы?
Ҡыҙ күңелен алғас батыр егет,
Ҡыҙ буйһонмай тороп ҡалырмы?

Салауат менән Гөлбәзир бына шулай икәү-ара йырлашып, уйхистәрен, кисерештәрен аңлата. Башҡа ҡыҙҙар ҙа йыйылып, бергә уйнап-көлөшөп, кис еткерәләр. Гөлбәзир ҡайтҡандан һуң, Салауат та кисләтеп, кисен һыйыр һауғанда Һағынбайҙың йортона килә. Һағынбай иһә йола буйынса таң менән тирә-яҡ йәйләүҙәргә ат саптырып, халыҡ йыйып, тыу бейәләр һуйҙырып, кейәүенең килеүен дан итеп туйлай. Бөтә тирә йәйләүҙә ике-өс көн буйына шау була. Салауат ҡайтыр саҡ еткәс, ир-егет, ҡатын-ҡыҙ, йәш-елкенсәк, ҡарт-ҡоро — барыһы оҙатырға йыйыла. Ул бөтәһе менән һаулашып: ”Олатайҙар, инәйҙәр! Ағай, эне, һылыуҙар! Көләс йөҙлө еңгәләр! Бейә һауып, һабанан ҡымыҙ ҡойоп һыйлаусы, йәшлек дәртен иҫкә алып, уйнап, көйләп йырлаусы!” — тип өндәшеп, үҙен танытып, йорт-ил хәстәрен ҡайғыртып, йөрәк һүҙҙәрен белдерә. Яҡты йөҙ менән ҡаршы алғанға, йылы һүҙҙәр менән аш биргәнгә, ихлас ҡунаҡ иткәнгә рәхмәт әйтеп, бары менән хушлашып, ҡайтып китә.

Салауат менән Гөлбәзирҙең ҡара-ҡаршы йыры — әлмисаҡтан йәрәшелгән ике йәрҙең үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙе асыҡлау, аңлашыу, хис-тойғоларҙы, ниәттәрҙе белдереү йыры. Егет башта һөйгән ҡыҙының ниңә алҡыныуһыҙ ҡаршылауын, янына килмәй тороуын, ныҡ һағынып, ҡосағына һыйынмауын аңларға теләй. Гөлбәзир иһә, башҡорт ҡыҙҙарына хас тыйнаҡлылыҡ, сабырлыҡ менән егет талпынған да йөрәген бер аҙ баҫһын өсөн тыныслыҡтар һаҡлап һүҙ ҡушмауын әйтә. Артабан аңлатылыуынса, берҙән, Гөлбәзиргә ата бейлеген еңеү анһат түгел; икенсенән, ҡыҙ баланың сәскәләй наҙы бар; өсөнсөнән, ул егетен һынай; дүртенсенән, уны көндәше көнөн бүләсәге уйландыра. Әйткәндәй, ”Юлай менән Салауат” ҡобайырында Һағынбай тархандың Юлайға: ”Оло улың үлгән һуң, көндәш итеп ҡыҙыма, Салауатҡа ҡатынға килеңде алған һуң”, — тигән һүҙе бар. Ырыуҙаштарының иһә хәтерләүенсә, уйынса, Салауаттың тәүге йәнәше Әминә ағаһының кәләше булған һәм тол ҡалғас, йола буйынса ҡустыһына бирелгән. Тарихи белешмәләр иһә Салауат үҙе Юлайҙың оло улы икәнен таныта. Тикшеренеүселәрҙең фекеренсә, бәлки Салауаттың ике туған ағаһы булғандыр. Мәгәр, Салауат бала саҡта уҡ Гөлбәзирҙең инәһе, кейәүкәйем, тип, башына уҡалы таҡыя кейҙерә, ҡыҙының ҡулдарынан тотоп үптерә. Үҫеп еткәс, Салауаттың күңеле башҡа ҡыҙҙарға мөрхәтһенмәй, йөрәгенең сәбе — йәштән йәрәшелгән Гөлбәзир. Батыр егет ҡыҙ күңелен алғас, ҡыҙ ҙа уға буйһона, Салауатына һыйына. ”Салауат” тигән халыҡ йырында йырланыуынса (1, 58):

Салауатҡай кейгән, ай, күк сәкмән
Гөлбәзиркәйенә саҡ икән.
Салауат тигән, ай, болғадир
Күп халыҡтарға баш икән.

Борон төрки ҡәүемдәрендә, шулай уҡ башҡорттарҙа күп никахлы, йәрле булыу яҙыҡ һаналмаған. Был түл йәйеү, ғаиләне,

нәҫел-нәсәпте ишәйтеү, йәнә ир-егеттең күңелен бөтәйтеү, йөрәктәрен яндырып, башҡа һылыуҙарға ымһынып бармау сараһы ла. Сөнки ир кешегә Хоҙай Тәғәлә ихтыяры менән тәғәйен йәрҙәре иркә, итәғәтле һәм ҡәҙерле. Әүәл мосолман ҡатын-ҡыҙы иренең бернисә хәләл ефете булыуына ғәмәлдә тыныс ҡараған. Сөнки Аллаһы Тәғәлә Ҡөрьән Кәримдә әйтә: ”Ирҙәр ҡатындарҙан өҫтөнөрәктер”. Ислам диненә нигеҙ һалыусы пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт ғәлиәссәләмде ҡатындары бик хуш күргән һәм ҡәҙер иткән.

”Рәсүлде Хәҙисәһенән ҡала иң яраттырыр Ғәйшә һылыу булған, тиҙәр. Бер заман, байтаҡ ғүмер бергә йәшәгәс, Мөхәммәттең үҙен өҙөлөп һөйөүен татығас, Ғәйшәһе һорай ҡуйған икән: ”Мине лә Хәҙисәң кеүек яратаһыңмы?” — тип. ”Юҡ, — тигән быға рәсүл. — Хәҙисәгә тиңләшер бер хәләлем, йәриәм дә була алмаҫ. Ни өсөн тигәндә, Хәҙисә бәғерем мине ярлы бәдәүиҙән бай кеше итеште, мине бөтә рухы-бәғере менән Аллаһы Тәғәләнең хаҡ рәсүле итеп ололаңы, исламға инанды, минең иң ныҡлы таянысым һәм тоғро юлдашым булды”. Сибәр, йәш һәм аҡыллы Ғәйшә бындай йөрәктән сыҡҡан һүҙҙәренә көнләшеү йә ярым үпкәләү рәүешенә тамсы ла шик ҡалдырмайынса, хәләл ирен, пәйғәмбәрен тағы ла нығыраҡ хөрмәт итергә, шунса яратырға, йәнен-тәнен тамам бағышларға ҡеүәт тапты” (6, 82).

Мөхәммәт пәйғәмбәр һәм уның хәләле Ғәйшә мөнәсәбәттәре бик тә фәһемле. Ғаилә татыулығы һәм ныҡлығы, һис шикһеҙ — ирҙең хәләл ҡатынын өҙөлөп һөйөүендә, ҡатындың хәләл иренең таянысы, тоғро юлдашы булыуында, уны ҡәҙер-хөрмәт итеүендә, ололауында, йәнен-тәнен уға бағышлауында...

Тарихи сығанаҡтарҙа сағылыуынса, Юлай Аҙналы улының өс ҡатыны, ике улы булған. ”Юлай менән Салауат” тарихи ҡобайырында әйтелеүенсә: ”Юлайҙың йәш бисәһенән өсөнсөгә тағы ла ул тыуған. Халыҡты йыйып туйлаған, Салауат тип исем ҡуштырған”. Ғөрөф-ғәҙәт буйынса Салауат батыр ҙа күп никахлы. Халыҡ ижадында кәүҙәләнгән ҡатындары — Әминә, Гөлбәзир, Зөләйха, йәнә рус ҡыҙы, балалары — Рамазан, Хәсән, Миңлеяза... Салауаттың бер йырында Әминәкәйе менән Рамазаны телгә алына (4, 174):

Юлһыҙ ғына ерҙән юлдар ярып,
Ҡайтып киләм, тауҙар артылып.
Эй, һағындым, йәнем, ер еләгем,
Күҙ алдымдан китмәй балҡыуың.

Таңдарымда миңә ҡояш баҡты,
Юл күрһәтте йондоҙ төндәрҙә.
Көнөн-төнөн сабам тынғы белмәй —
Иҫән-һауҙар микән илдәрҙә?

Әминәкәй көтөп ҡаршы алыр,
Рамазаны булыр ҡулында.
— Һаумы, улым, һаумы, Рамазаным,
Һин тип йәндәр аттым юлымда.

Тотҡонлоҡта иһә Салауат тыуған илен, хур ҡыҙылай Зөләйхаһын, күҙ нурындай ҡыҙы Миңлеязаһын һағынып йырлай (1, 63):

Иҫтәремдән сыҡмай Уралҡайым,
Шишмәләре, сахра туғайы.
Йәннәт төҫөн биргән сәскәләре,
Һандуғастай моңло ҡурайы.

Һары ҡамыш беҙҙең күлдәрҙә,
Шау-шыу килә ҡаты елдәрҙә.
Күлдән генә алған балыҡ кеүек,
Ғәзиз башым — алыҫ илдәрҙә.

Өйөр генә йылҡы араһында
Һөйөп менгән атым бүртә ине.
Күҙ нурындай ҡыҙым,
Миңлеязам,
Үкенескә икән, иркә ине.

Ҡая ташҡа ҡарап уҡ аттым,
Ыласын ғына ҡошто ҡолаттым.
Таң алдында һылыу Зөләйханы
Йоҡоһонан йырлап уяттым.

Юл буйында ятҡан бүҙәнәне
Сапмай киттем, үлгән турғай, тип.
Зөләйханы үпмәй киткән булдым,
Әллә ниңә юлым уңмай, тип.

Матур ғына ерҙең үҙәгенән
Шылтырап ҡына аға Үҙәнем.
Ҡытат күлдәк кейеп, ҡыя баҫып,
Йөрөй микән минең гүзәлем.

Япа-яңғыҙ ғына ҡарсыға
Талпыналыр, бахыр, ҡош күреп.
Ике беләккәйен яҫтыҡ итеп,
Йоҡлай микән Зөләйхам
төш күреп.

Йүгереп-йүгереп үрттәр һалдым
Үҙән буйҙарына таратып.
Хур ҡыҙынан артыҡ Зөләйханы
Кемдәр һөйөр икән яратып?..

Йәнтөйәгенең йәмлелеге, Урал ҡыҙҙарының һылыулығы, йән һөйгәндәре, хәләлдәре Салауаттың йәненә — ҡот, сихәт, ошо хаҡта йырҙары йорт-иленең азатлығы өсөн уҡ-йәйәләр алып яу сапҡанда — көс, аяҡ-ҡулы тимер бығауҙа саҡта, күргән ғазаптары ерҙән ашып күккә олғашҡанда баш эймәй йәшәргә — дәрт-дарман. Бына ниндәй ҡөҙрәткә, имгә эйә ул өмөт, наҙ, һағыш менән мөлдөрәмә тулы мөхәббәт! Бөйөк шағир Ғүмәр Хәйәм яҙғанса (7, 117; 202):

Мәңгелектең ут-ҡояшы —
мөхәббәт ул,
Йәшеллектең бәхет ҡошо —
мөхәббәт ул.
Юҡ, түгел ул былбыл йыры,
күңел зары,
Аһ та итмәй үлһәң, ошо —
мөхәббәт ул!

Һәр йөрәктең йәрҙән
әсир булғаны — хуш,
Йәр йөрөгән гөл саңы ла
ҡунғаны — хуш,
Йәрең һалған йәрәхәт тә
рәхәт кенә,
Һәр нәмәне уның
ҡулы һыҙғаны — хуш!

## Әҙәбиәт


1. Башҡорт халыҡ ижады. Йырҙар. Өфө: Китап, 1974.
2. Башҡорт халыҡ ижады. Тарихи ҡобайырҙар, хикәйәттәр. Өфө: Китап, 2000.
3. Башҡорт халыҡ ижады. Йола фольклоры. Өфө: Китап, 1995.
4. Йырауҙар, сәсәндәр, мәғрифәтселәр. Өфө: Китап, 2007.
5. Труды научного общества по изучению быта, истории и культуры башкир при Наркомпроссе БССР. Выпуск 2. Стерлитамак, 1922.
6. Хөсәйенов Ғ.Б. Мөхәммәт пәйғәмбәр // Ватандаш. 2007. №6.
7. Ғүмәр Хәйәм. Робағиҙар. Өфө: Китап, 1992.